“Республикамды данлайым” конкурсы

Нимә ул минең өсөн тыуған ил?

(Инша)

Шәйхатарова Дарина Рауил ҡыҙы

Яңауыл ҡалаһы муниципаль бюджет дөйөм белем биреү учреждениеһы

И.Ш.Мөҡсинов исемендәге гимназия ,3-сө г класс

Яңауыл муниципаль районының мәғариф бүлеге

Фаршатова Әлфиә Әнүәр ҡыҙы

башҡорт теле һәм әҙәбиәте  уҡытыусыһы

Радионан көй ағыла…Ҡушылып йырлай башлайым:

Иң матур ил беҙҙең ил,беҙҙең ил,

Күге уның гел аяҙ,гел аяҙ…

Нимә ул Тыуған ил? Ул — һинең атайың, әсәйең, ағайың, апайың, һеңлең, ҡартатайың, өләсәйең. Ул — һинең тыуған, йәшәгән йортоң, урамың, ауылың, ҡалаң.Ул — һин уҡый торған мәктәп, ундағы дуҫтарың, уҡытыусы ағай- апайҙарың. Ул- һинең һулаған һауаң, баҫып йөрөгән ерең.

Тыуған ер! Сикһеҙ байлыҡтарға, хатта зәңгәр күк йөҙөндә балҡыусы яҡты ҡояш менән алтын айға ла тиңе булмаған нимә ул! Ниндәй һуң ул минең тыуған ерем, тыуып-үҫкән ғәзиз төйәгем?

Беҙҙең барыбыҙ өсөн дә ғәзиз Тыуған илебеҙ- Башҡортостан Республикаһы. Беҙ йәшәгән ҡала, ауылдар,беҙ eләк йыйған урман-болондар, беҙ балыҡ тотҡан күлдәр, йылғалар...Тыуған яҡ – ул һинең илең, һин ысын йөрәктән: "Ул минең илем, Башҡортостан – минең Ватаным!” – тип әйтә алаһың. Бында һинең күп туғандарың,дуҫтарың йәшәй, һин улар менән аралашаһың. Шулай уҡ доньяла тиңе булмаған матур сәскәләргә, йәшәү ҡыуанысы менән осоп йөрөгән ҡоштарға, күбәләктәргә лә тыуған яҡтың йылыһы һалынған. Тыуған ил һине яҡлай, ул һәр ваҡыт һинең күңелеңдә. Үҙебеҙҙең Ватаныбыҙ тураһында ҡайғыртып, уны яҡлап, яратып йәшәйек.